

Шүлгәнташ мәмерйәһе — Башҡортостандың Бөрйән районында Ағиҙел йылғаһының уң яҡ ярында, Шүлгән-Таш ҡурсаулығы биләмәһендә урынлашҡан. Ул Көньяҡ Уралда бурташ, гипс, доломит кеүек тау тоҡомдарынан торған мәмерйәләрҙең иң ҙурҙарының, иң матурҙарының береһе, тәутормош сәнғәте








1965 йылда Шүлгәнташ тәбиғәт ҡомартҡыһы тип иғлан ителә.

*Буклетты әҙерләне:*
*Туймазы педагогия колледжының «Аҡтамыр» ижади клубы ағзалары.*
*Етәксеһе –Кәримова Г.Я.*

ТУЙМАЗЫ ПЕДАГОГИЯ КОЛЛЕДЖЫ

*«Аҡтамыр» ижади клубы*

# *“Һаумы, Шүлгән!*

## *Тынлығыңды тағы Бүләбеҙ бит, ғәфү ит инде...”*



# «ШҮЛГӘН МӘМЕРЙӘҺЕН ҺАҠЛАЙЫҠ!

***“Шүлгән!***

***Иң боронғо храм булып***

***Нурың менән илдең йөрәккә.***

***Эрмитаждар, Луврҙар бит тыуған***

***Һинең ташыңдағы һүрәттән.”***

**(Р.Бикбаев)**



Шүлгәнташ — Көнсығыш Европала һәм Азияла таш быуаттың тәүге осоронда (палеолит) буяу менән һүрәт эшләү сәнғәте яҡшы күрһәтелгән һәм һаҡланған берҙән-бер мәмерйә. Шүлгәнташ мәмерйәһенә ингән урындың киңлеге 40 метрға етә, бейеклеге — 20 м. Мәмерйәнең өйрәнелгән оҙонлоғо 3 саҡрымдан ашыу. Унда — һарҡып, ағып барлыҡҡа килгән майташтар, сталактиттар, сталагмиттар, ҙур залдар, ер аҫты йылғаһы, к9лдәр бар.

Мәмерйә экиәттәрҙә һөйләнгән һоҡланғыс һарайҙы хәтерләтә. Тәүтормош кешеләренең һүрәттәр галереяһы беренсе ҡаттың ике ҡоро стенаһында һәм икенсе ҡаттың ҙур залында урынлашҡан. Һүрәттәр ҡыҙыл буяу, ҡыҙҙырылған майҙа иҙелгән охра менән яһалған.

Мәмерйәлә ер аҫты йылғаһы Шүлгән аға. Мәмерйә ауыҙынан 150—170 м гөрләп ағып, Шүлгән Ағиҙелгә ҡушыла.



“Эй, боронғо рәссам!
Буяуҙарҙы
Күҙ йәшендә әллә иҙҙеңме?
Һүрәттәрҙе алыҫ ейәндәрең
Мәсхәрәләр тиеп һиҙҙеңме?”

*Был—Р.Бикбаев һүҙҙәре. Ул мәмерйә эсендә замандаштарыбыҙ ҡалдырған яҙыуҙарҙы күреп, әсенеп яҙа. Ысынлап та, республикабыҙҙан ситтә лә билдәле булған боронғо ҡомартҡыбыҙҙы ҡәҙерләп һаҡлайыҡ, “автограф” ҡалдырыусыларға аяуһыҙ булайыҡ. Мәмерйә эсен һәм эргәһен бысратмайыҡ!*